# ОСКОН

Ноябрь, 2019 йыл Осҡондан ялҡын ҡабына


## Тәүге ҡар



*Урман - ҡырҙарға*

*Юрған ябылған,*

*Ҡош мамығылай*

*Ап-аҡ ҡар яуған,*

*Шаулы урмандар*

*Тып-тыныс ҡалған.*

***Мёзитов Динислам, 5 -се класс***

## Ҡыш

Бына һалҡын ҡыш килеп етте. Ҡоштар йылы яҡтарға осоп киттеләр. Ағастар ап-аҡ шәлдәрен ябындылар. Урманда тынлыҡ, ҡоштар һайрауы әҙәйҙе. Тумыртҡаның туҡылдатыуы ишетелә. Хайуандарға ҡыш көнө йәшәүе еңел түгел. Уларға ашарға табыуы ауырлаша. Көндәр ҙә ҡыҫҡарҙы. Йылғалар, күлдәр туңдылар. Ҡояш та үҙенең нурҙары менән аҙ йылыта. Бар тәбиғәт йоҡоға тала.

Һыуыҡтары шартлай унын
Ноябрҙән мартҡаса.
Хатта йөнтәҫ туңлы айыу
Өңөнә инеп ҡаса.
(Р.Бикбаев)

Тик айыу ғына, үҙенең өңөндә ҡаты йоҡоға сума. Һәр бер миҙгел үҙ яғы менән матур. Ә ҡыш матур ғына түгел, ул серле лә.

***Хәйруллина Дилара, 9-сы класс***

## Мәктәп яңылыҡтары









# Әсәйем –берҙән берем

**Әсәйем – ҡәҙерлем**

Донъяла иң ҡәҙерле, иң ғәзиз кеше – ул әсәй. ”Әсәй” - тип баланың теле асыла. Әсәләр ҡояш төҫлө беҙҙе үҙенең йылы нурҙары менән йылыта, яҡлай, һаҡлай. Һәр балаға үҙ әсәһе ҡәҙерле.

Миңә лә әсәйемдән яҡшыраҡ, матурыраҡ кеше юҡ. Мин әсәйемде бик яратам. Ул бик ғәҙел, хуш күңелле, бөхтә, эш һөйөүсән, кешеләргә һәр саҡ иғтибарлы һәм ихтирамлы. Ул мине һәр саҡ аңлай, аҡыллы кәңәштәрен бирә.

-Бала саҡта төн йоҡоларын ҡалдырып, мине ҡараған - әсәй!

-Илағанда ҡосағына алып, йыуатҡан - әсәй!

-Ергә баҫып беренсе тапҡыр атлап киткәндә етәкләгән - әсәй!

Ул өйҙә булмаһа күңелһеҙ, өйгә ҡайтһа, бөтә донъя яҡтыртып киткәндәй тойола.

Әсәй бешергән аштар
Телде йоторлоҡ тәмле.
Әсәй өйҙә булғанға
Йорт әсе лә бик йәмле.

Әсәйҙәр – ғаилә усаһы, тормош йәме.
Әсәйем, берҙән - берем!
Һиңә низәр генә теләһәм дә аҙ булыр кеүек.
Һиңә һаулыҡ, оҙон ғүмер теләйем.

***Ғәликәйева Ләйсән, 5-се класс***

*****************************************************************************************



**Әсәйем**

Һин минең матурым,
Гуҙәлем, аҡыллым
Донъяла иң яҡыным
Берҙән – берем әсәйем.

Һин миңә донъяға күҙ астың,
Донъяның матурлығын күрһәттең,
Атларға, уҡырға, ҡалаҡ тоторға,
Һин бит әсәйем өйрәттең.

Сирләгәндә ҡараның, илағанда китмәнең,
Ауыр булғанда тыңланың.
Һин бит иң яҡын кешем минең
Яратам һине гузәл әсәйем.

***Ильясов Ирхан, 7-се класс***

## Алтын ҡулдар

Алтын ҡулдар кемдә ул?-
Алтын ҡулдар әсәйемдә.
Ашарға ла бешерә ул,
Тегә беҙгә кейем дә.

Гөлдәр бигерәк матур
Уларҙы әсәй үҫтерә .
Тәмле булып бешә икмәк
Аш та бешеп өлгөрә.

Әсәйем өй йыйыштыра
Мин дә уға булышам
Үҫкәс тә, хәҙер ҙә
Уға оҡшарға тырышам

***Ғәлиханова Рузилә, 9-сы «Б» класы***



***Әсәйемде көтәм. Ғилманова Уралиә, 6-сы***

*****************************************************************************



## Әсәйем.

Ҡайҙа барһаң, күҙ алдында
Һәр саҡ күңелеңдә йәшәй.
Ул беҙгә иң яҡын кеше,
Ул белһәгеҙ – беҙҙең әсәй!

Минең әсәйем иң матуры, иң аҡыллы, яҡшыһы. Уның исеме – Гөлназ. Әсәйемдең күҙҙәре һоро, сәсе ҡара, ҡолағы әҙерәк ҙур, буйы оҙон. Ул матур кейемдә йөрөй. Ә өйҙә булғанда шорты һәм футболка кейергә ярата. Әсәйем гөл үҫтерергә ярата. Беҙҙең тәҙрә төбөндә төрлө сәскәләр үҫә.Ашарға ла бик тәмле бешерә.Ул бишбармаҡты ла бешерә белә.Уға ашарға бешерергә атайым ярҙамлаша. Атайым менән бергә магазинға барырға, өй эштәрен бергә бөтөрөргә яраталар. Әсәйем мәктәптә эшләй. Балаларға башҡорт телен өйрәтә. Балаларға, уның яратҡан һүҙе: “Тырышып уҡығыҙ!” – тип әйтә. Әсәйемдең дуҫтары, туғандары бик күп. Улар бер-береһе менән һөйләшеп торалар.

Мин әсәйемде бик ныҡ яратам. Уға ныҡлы һаулыҡ теләйем. Мәңге йәшә, әсәйем.

***Азаматова Зөлхизә, 5- се класс***

# Әйтсе , әсәй, йәшәү өсөн ҡайһы юл менән барырға?!

Тормош бит ул бер ҡараһаң,
Йылмайып көлгән кеүек.
Икенсе яҡтан ҡараһаң,
Шәмдәре һүнгән кеүек.
(Йыр)

Эйе, йырҙа йырланғанса был тормош һәр кем өсөн еңел бирелмәй. Тормош юлдары бик ҡатмарлы, аҙым һайын ул һине һынап ҡарарға теләгәндәй. Тик сабый бала ғына уның ҡатмарлығын аңламай кеүек. Бала күңеле – аҡ ҡағыҙ" – тигәндәр ололар. Бик хаҡ һүҙҙәр.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы,бөгөнгө көндә насар юлға баҫҡан балалар һәм йәштәр бик күп. Тәмәке тартҡан,эскелек юлына баҫҡан, хатта наркотик матдәләр ҡулланыусылар ҙа бар. Уларҙы мин бик ҡыҙғанам һәм: "Тиҙерәк был һаҙлыҡтан сығығыҙ!"- тип әйткем килә.

Тормошта үҙ юлыңды таба белергә кәрәктер, тип уйлайым мин. Быны өсөн тырышып уҡырға һәм киләсәккә маҡсаттар ҡуя белергә кәрәк. Юғары уҡыу йортона инеү, яратҡан эшеңә урынлашыу һәр кеше өсөн этәргес булып тора. Был һәр кемдең хыялылыр. Ә хәҙергә атай- әсәңде тыңлау, ололарҙың кәңәштәренә ҡолаҡ һалыу мотлаҡ кәрәк.

Башҡорт әҙәбиәте дәресендә беҙ Ғәлимов Сәләмдең "Шоңҡар" поэмаһы менән таныштыҡ. Унда төп герой – Әхмәт кеше һүҙенә ышанып насар юлға баҫа. Урлашыу, хатта кеше үлтереүҙән дә тартынмай ул. Бер аҙҙан был тормош уны тамам ялҡыта. Артына әйләнеп ҡараһа, янында ышанырлыҡ, таянырлыҡ кешеһе лә булмай. Һәм ул иң яҡын йән эйәһе – тоғро Бурылы менән һөйләшә: "Әйтсе, Бурыл, йәшәү өсөн ҡайһы юл менән барырға" – ти ул. Ошонан һуң бөтә тормошон күҙ алдынан үткәрә лә: " Нисек тә кеше булырға, тура юлға баҫырға," – тигән маҡсат ҡуя. Маҡсатына, әлбиттә, ирешә ул. Уҡыу йорто тамалай, архитектор булып китә. Әҫәрҙең аҙағында һөйгән ҡыҙы Гөлнуры менән осраша.

Беҙ ҙә тиҙҙән яратҡан лицейыбыҙ менән хушлашырбыҙ. Тормошта кеше булып ҡалыу өсөн , мин иң яҡын кешем Әсәйемә өндәшәм: "Әйтсе, әсәй , йәшәү өсөн ҡайһы юл менән барырға".

***Азаматова Сәлимә ,10- сы класс***

Баш мөхәррир: Ильясова Г.М. Компьютер версткаһы: Стрижова И.М.
Мөхәрриәт: 5-11 класс уҡыусылары.